*Б.СӘЛИМЙӘНОВ*

# …ЕРИНБУРГ БАШҠЫШ… ЮЛ…



*«Урал-Постер» галереяһының арт-директоры Салауат Фазлетдинов*

Екатеринбург ҡалаһында майҙан тотҡан һиммәтле ҡәрҙәштәребеҙ бар. Шундай ир-егеттәрҙең береһе — Салауат Рафинат улы Фазлетдинов. Ул Башҡортостандың Мәсетле районының Яуыш ауылында тыуған, Силәбе өлкәһенең Нязепетровск ҡалаһында үҫкән, урта мәктәптә белем алған, Калинин исемендәге машиналар эшләү заводында токарь булып эшләгән. Армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡас, Урал дәүләт университетының биология факультетын тамамлаған, мәктәптә уҡытҡан. Шунан һуң «Промиздат» нәшриәтенең башҡарыусы директоры, «Юнайтед-Постер» швед вәкиллегенең генераль менеджеры булған. Әле «Урал-Постер» галереяһының арт-директоры.

Галерея рәссамдарҙың күргәҙмәләрен ойоштороу, һүрәттәрен һатыу, һүрәт эшләү сәнғәте әҫәрҙәрен нәфис йыһазландырыу менән мәшғүл. Салауат үҙе лә һүрәт төшөрөргә ярата. Һынлы сәнғәт оҫталығын камиллаштырыу өсөн Урал дәүләт университетында сәнғәт фәне белгесе — дизайнер-аналитик һөнәре буйынса ситтән тороп уҡый. Ҡыҙыҡһыныу даирәһе киң. Екатеринбург ҡалаһының һынлы сәнғәт тормошон өйрәнә. Ошо мөхитте тикшереп, башҡорт көнкүрешен, йәшәйешен сағылдырған һүрәттәр юҡлығын асыҡлаған. Батша заманында, совет власы йылдарында ла Екатеринбург рәссамдары был юҫыҡта ижад итмәгән. Салауат быны экәмәт хәл тип иҫәпләй. Был тарихи хатаны төҙәтеү өсөн рәссамдарға башҡорт тормошон яҡтыртҡан һүрәттәр эшләргә заказдар бирә. Үҙ теләге, уй-ниәте менән үҙ аҡсаһына!.. Үҙенсәлекле, оригиналь эштәрҙән коллекция тупламаҡсы. Шунан һуң Екатеринбург ҡалаһында башҡорт халҡының музейын ойошторорға хыяллана. Свердловск өлкәһе ата-бабаларыбыҙ, уларҙың уландары донъя көткән ер булараҡ, уйниәтен изге һанай.




*С.Фазлетдинов. «Башкорт моңо»*

Салауат бала саҡтан урыҫ мөхитендә йәшәһә лә башҡорт рухлы ир-егет. Был уның, мәҫәлән, «Башҡорт моңо» тигән һүрәтендә лә баҙыҡ төҫмөрләнә. Башҡорт донъяһын киңерәк даирәгә танытырға алҡынған ҡәрҙәшебеҙ Свердловск өлкәһе башҡорттары ҡоролтайына мәҙәни, матди яҡтан да ҙур ярҙам күрһәтә.



09-2001.p65 37 28.08.01, 10:52
Black